# ҠУШЫМТА

## Башҡорт теленән балаларҙың белем һәм күнекмәләрен баһалау нормалары.

Рус телле мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың белем һәм күнекмәләрен баһалау маҡсатында, башланғыс һәм юғары синыфтар өсөн, махсус нормалар билдәләнә. Был нормалар саф башҡорт мәктәптәре йәки башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе мәктәптөр өсөн билдәләнгән нормаларҙан бер ни тиклем айырыла. Ҡулланыу өсөн уңайлы тип иҫәпләп, бөтә нормаларҙы бер урынға туплау урынлы тип табылды.

### 1. Балаларҙың укыу һәләтлектәрен баһалау

Уҡыусыларҙың башҡорт телендә уқыуын, яуаптарын баһалағанда, уларҙың тәҡдим ителә торған тексты аңлы һәм тасуири уҡыуы, йөкмәткеһен тейешле кимәлдә үҙләштереүе, кәрәкле кимәлдә һөйләй алыуы иҫәпкә алына.

Йыл аҙағына уҡыу тиҙлеге минутына түбәндәгесә билдәләнә:

| Кластар | Һүҙ | Билдә | Эстән уҡыу |
|---|---|---|---|
| 5-се класс | 70-85 | 230 - 250 | 95-110 |
| 6-сы класс | 90 - 100 | 250 - 280 | 120-150 |
| 7-се класс | 100-120 | 300 - 320 | 160 - 180 |
| 8-се класс | 130-150 | 320 - 350 | 180 - 200 |
| 9-сы класс | 160 - 200 | 350 - 400 | 250 - 300 |

**Уҡыу техникаһы тураһында һөйләгәндә, шуны иҫтә тоторға кәрәк:**
1. Кешегә, ғәҙәттә, күберәк эстән уҡырға тура килә. Шуға күрә дәрестәрҙә балаларҙы бәләкәй синыфтарҙа ҡысҡырып укырға өйрәтеү норма һанала.

Эш методикаһын ошондайыраҡ итеп ойоштороу кәңәш ителә: баһаға уқыу өсөн, һәр уҡыусыға айырым текст әҙерләнә, әммә шиғри әҫәрҙәр алыу уңайлы түгел. Текстар хикәйәләү формаһында, йөкмәткеһе тамамланған, ваҡиғалар һүрәтләнеше эҙмә-эҙлекле булырға тейеш. Текстағы һүҙҙәр, билдәләр алдан һанап ҡуйыла. Бала ошо тексты күпме ваҡытта уҡый, шунан сығып уның бер минутта уртаса нисә һүҙ уҡыуы асыҡлана.

2. Уҡыу техникаһын формалаштырыу 4-се синыфта тамамлана. Ә юғары синыфтарҙа уҡыу һәләтлеген камиллаштырыу регуляр рәүештә үткәрелә. Үрҙә килтерелгән цифрҙар уҡытыусыға ориентир өсөн тәҡдим ителә. Балаларҙың телде белеү кимәленән сығып, уҡытыусы был һандарҙы ижади ҡулланыуға хоҡуҡлы.

## 2. Яҙма эштәрҙең күләме һәм уларҙы баһалау нормалары

Уҡытыу рус телендә барған мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә яҙма эштәрҙең төрлө формалары ҡулланыла. Уларҙың ҡайһы берҙәре башланғыс синыфтарҙа, ҡайһылары юғары синыфтарҙа күберәк һәм өйрәтеү маҡсатында үткәрелә. Шулай уҡ яҙма эштәр (бигерәк тә юғары синыфтарҙа) уҡыусыларҙың белем Һәм күнекмәләрен тикшереү өсөн дә файҙаланыла. Яҙма эштәрҙең рус телле мәктәптәрҙә киң ҡулланыла торған түбәндәге төрҙәрен күрһәтергә мөмкин:

- һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу;
- һүҙлек диктанттары;
- ғәҙәти диктанттар;
- һорауҙарға яуаптар;
- тестарға яуаптар, яҙыу;
- изложениелар;
- иншалар.

Әйтергә кәрәк, һаналған яҙма эштәрҙе башланғыс синыфтарҙа элементар характерҙа, өйрәтеү маҡсатында һәм ныҡлы әҙерлектән һуң ғына яҙҙырыу кәңәш ителә. Әҙерлек эштәре төрлөсә булырға мөмкин: һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе яҙыр алдынан Бер нисә тапҡыр телдән әйттереү, ниндәй хәрефтәр яҙылыуын анализлау, һүҙҙәрҙе һауала (таҡтала) яҙып ҡарау, таҡтала яҙылғандарҙы күмәкләп тикшереү, хаталарын төҙәтеү һ.б. Фәҡәт ошондай әҙерлек эштәре үткәрелгәндән һуң ғына, эштәр аҡка яҙыла. Дөрөҫ, әҙерлек эштәрен уҡытыусы, үҙ уҡыусыларының әҙерлек, телде белеү кимәленән сығып, үҙенсә хәл итә ала.

Юғары синыфтарға күсә барған һайын, яҙма эштәрҙе яҙҙырыу методикаһы ҡатмарлана, йәғни, башҡорт мәктәптәрендә ҡулланыла торған алымдарға яҡыная бара. Был синыфтарҙа контроль характерындағы яҙма эштәргә өҫтөнлөк бирелә.

- Өйрәтеү характерындағы яҙма эштәр, һүҙлек диктанттары был таблицаға инмәй, улар ғәҙәттәге дәрестәрҙә үткәрелә. Уларҙың йышлығын, күләмен уҡытыусы үҙе билдәләй.
- Күсереп яҙыу өсөн тәҡдим ителә торған текст күләме контроль диктант тексы күләменә тап килә. Ғөмүмән, һәр дәрестәге яҙыу эштәре лә шул синыфтағы контроль диктант тексы күләменә тап килергә тейеш.
- Контроль характерҙағы яҙма эштәр текстарының күләме түбәндәгесә билдәләнә:

| Эш төрҙәре | Кластар | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| Һүҙлек диктанты | 12-15 | 15-18 | 18-20 | 20-22 | 22-24 |
| Диктант | 40-50 | 60-70 | 70-80 | 80-90 | 90-100 |
| Изложение | 40-50 | 50-60 | 60-70 | 70-80 | 80-90 |
| Инша | 45-55 | 55-65 | 65-75 | 75-85 | 85-95 |

Был ваҡыт эсендә уҡыусылар ижекләп, һүҙләп күсереп яҙа, диктант, изложение, инша кеүек яҙма эштәрҙе башҡара. Ваҡытты шунан да күберәк биреү кәңәш ителмәй. Әммә (конкрет ситуацияға ҡарап, яҙма эштәр башҡарыуға ваҡытты уҡытыусы 3-5 минутҡа оҙайта йәки ҡыҫҡарта ала.

Урыҫ телле мәктәптәрҙә башҡорт теленән ҡуйыла торған баһалар башҡа предмет буйынса алған баһаларҙан кәм булырға тейеш түгел. Шуға ла бындай мәктәптәрҙә башҡорт теленән яҙма эштәр ныҡлы әҙерлек үткәргәндән һуң ғына башҡарыла.

Баһалар, нигеҙҙә, уҡыусыларҙы башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу, дәртләндереү маҡсаты менән ҡуйыла.

Шик юҡ, мәктәптә уҡытыла торған башҡа предметтарҙы өйрәнгәндә лә башҡорт теленә мөрәжәғәт итеү уны үҙләштереүгә ҡыҙыҡһыныу уята.

Шулай итеп, башҡорт телендә һөйләшеү, уҡыу, яҙыу күнекмәләрен үҙләштереү балаларға юғары кластарҙа белем алыуға нигеҙ әҙерләй, уларға республика, уның тәбиғәте, халҡы, сәнғәте, әҙәбиәте тураһында күберәк информация алырға ярҙам итәсәк. Юғары синыфтарҙа бындай эштәр тағы ла тәрәнерәк, күләмлерәк итеп үткәрелә. Былар бөтәһе лә республика илһөйәрҙәрен, юғары әхләкле шәхестәр тәрбиәләүгә ҙур мөмкинлек аса.

## 3.Яҙма эштәрҙе баһалау нормалары.

**Диктанттарҙы баһалау.**

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәр өсөн әҙерләнгән диктанттар тексына бөтә үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр инә.Грамматик эштәр өҫтәп бирелгәндә, диктант текстары бер аҙ ҡыҫҡартыла.Орфограммаларҙың һәм пунктограммаларҙың дөйөм һаны түбәндәгеләрҙән артмаҫҡа тейеш:

V класс -8/3 ,
VI класс -10/3 ,
VII класс -12/6,
VIII класс-14/6,
IX класс -16/6

**Диктантты баһалағанда төҙәтелә,әммә иҫәпкә алынмай торған хаталар:**
1)мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәләргә яҙылыштар;
2)әле үтелмәгән ҡағиҙәләргә яһалған хаталар;
3)автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуация;
4)механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу.
**Тупаҫ булмаған хаталар:**
1)ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
2)бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3)бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4)үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.
**Диктант бер генә билдә менән баһалана**.
**«5»**-хатаһыҙ йәки тупаҫ булмаған 1орфографик, 2пунктуацион хата булған эшкә: **1/0,1/2,0/2.**
**«4»**-2 орфографик, 2 пунктуацион , 1орфографик, 3 пунктуацион: **2/2,1/3,2/3,3/3,1/5,0/7.**
**«3»**- 4 орфографик, 4пунктуацион, 3 орфографик, 5 пунктуацион: **4/4,3/5,3/6,**
өс бер типтағы хата ебәрелһә,**6/6** хаталы эшкә лә өс ҡуйыла.
**«2»**- 9 орфографик, 9 пунктуацион:**8/10,9/9**

**Өҫтәлмә эштәрҙе баһалау:**
**«5»**-бөтә эш теүәл йәки бер хата булғанда.
**«4»**-эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнһә.
**«3»**-яртыһынан әҙерегә дөрөҫ эшләнһә.
**«2»**-бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгән.

**Инша һәм изложениеларҙы баһалау.**

| Билдәләр | Баһалауҙың төп критерийҙары | |
|---|---|---|
| | Йөкмәтке һәм телмәр | грамоталылыҡ |
| **«5»** | 1.Эштең йөкмәткеһе темаға тулыһынса тап килә.<br>2.Фактик хаталар юҡ.<br>3.Йөкмәтке эҙмә-эҙлекле асыла.<br>4.Эштең һүҙлеге бай.<br>5.Стиль һәм мәғәнәүи яҡтан текст камил.Эштә йөкмәтке яғынан-5,телмәр яғынан 5 кәмселек булырға мөмкин. | 3орфографик, 3 пунктуацион йә 4 грамматик хата булыуы мөмкин. |
| **“4”** | 1.Эштең йөкмәткеһе нигеҙҙә темаға тура килә(бер ни тиклем тайпылыштар бар).<br>2.Йөкмәтке дөрөҫ,ләкин ҡайһы бер фактик,һөйләм төҙөлөшөндә хаталар бар. | 7 орфографик, |

| | | |
|---|---|---|
| | 3.Фекер ебендә бер ни тиклем эҙмә-эҙлелек боҙолған.<br>4.Ҡайһы бер осраҡта һүҙҙәрҙең ҡулланылышында хата китеүе мөмкин.<br>5.Эштең стиле ярайһы уҡ төҙөк һәм мәғәнәле.Дөйөм алғанда,эштең йөкмәткеһендә 8,телмәрендә 8 кәмселек булыуы мөмкин. | 6 пунктуацион йәки 2 орфографик,<br>13 пунктуацион,<br>5 грамматик хата |
| **“3”** | 1.Эш теманан байтаҡ ҡына ситкә тайпылған.<br>2.Эштең йөкмәткеһе нигеҙҙә дөрөç,ләкин фактик,һөйләм төҙөлөшөндә хаталар байтаҡ.<br>3.Эҙмә-эҙлелек тулыһынса һаҡланмай,һүҙҙәрҙең ҡулланылышында хаталар бар.<br>4.Эштә йөкмәтке яғынан -15,телмәре яғынан15 хата булыуы мөмкин. | 10орфографик,<br>13 пунктуацион,<br>8 грамматик хата |
| **“2”** | 1.Эш теманы асмай.<br>2.Бик күп фактик,һүҙәр ҡулланылышында хаталар ебәрелгән.<br>3.Эштең бөтә өлөштәрендә лә фекерҙең эҙмә-эҙлелеге боҙолған,һөйләмдәр урынлы ҡулланылмаған,бәйләнеш юҡ.<br>4.Эштең йөкмәткеһендә-20 ,телмәрендә-20-нән күберәк хата ебәрелгән. | 12-15орфографик,<br>10пунктуацион,<br>12 грамматик хата . |

# 5- се а класы

**<u>1-се контроль күсереп яҙыу:</u>**

**Йәшә тыуған ерем!**

Тыуған республикабыҙ- һөйөклө Башҡортостан Ырымбур далаларынан Ыҡ йылғаһы ярҙарына тиклем һуҙылған. Ҙур, ҡеүәтле ил ул.

Урал тауҙары ҡуйынында, гүзәл Ағиҙел йылғаһы буйында , Белорет ҡоросо ҡайнай. Тауҙар итәгендә ҡара урман шаулай. Далаларҙы нефть вышкаларынан «урман» ҡаплаған. Унда бик күп мөғжизәләр башлана. Вышкаларҙан сығарылған нефть ер аçты юлдары менән тимер торбалар буйлап илебеҙҙең төрлө яҡтарындағы заводтарға оҙатыла. Нефтте « ҡара алтын» тип йөрөтәләр.

Еребеҙ, тыуған еремдең иң ҙур байлығы- унын туғандарса йәшәүсе күп милләтле эшсән кешеләре.

**<u>2-се контроль күсереп яҙыу:</u>**

**Башҡортостан йылғалары.**

Башҡортостандың матур тәбиғәте, ер аçты һәм ер өçтө байлыҡтары, ҡалын урмандары, иркен яландары, мул һыулы йылғалары һәм күлдәре күптәрҙе ҡыҙыҡтырған. Башҡортостанда алты йөҙгә яҡын ҙур һәм бәләкәй йылға бар.Шулаҙың иң оҙоно- Ағыҙел йылғаһы.

Унының оҙонлоғо 1420 саҡрымға етә. Ағиҙелдән һуң Ҡариҙел йылғаһы килә. Уларҙан ҡала Йүрүҙән, Инйәр, Таналыҡ, Сөн йылғалары. Мул һыулы йылғалар исемлегенә тағы ла Оло Эйек, Ыҡ, Ашҡаҙар, Таштуғай, Еҙем. Ырғыҙ, Сөм, Ҡармасан, Сәрмәсән инә.

Әммә тулы һыулы , ҙур-ҙур йылғалар һуңғы йылдарҙа бер аҙ һайыҡты. Урмандарҙы ҡырҡыу, йәшеллектең кәмеүе быға бик ҙур йоғонто яһай. Шуға күрә тәбиғәтте һаҡлау: ағастар ултыртыу, йәшеллекте һаҡлау- беҙҙең төп бурысыбыҙ.

**3-сө контроль күсереп яҙыу:**

**Тыуған ерем.**

Күлдәр бында тәңкә-тәңкә,
Толом- толом йылғалар;
Ата- бабам ҡото булып,
Ғорур баҫҡан ҡаялар.
Тик үҙенсә йырлай бында
Тауҙары, далалары;
Күкрәгендә биҙәк кенә
Ауылы, ҡалалары.

Кисен яҡты йондоҙсоҡтар
Еремә күскән төҫлө.
Үҙ бәхетен үҙе таба
Беҙҙә һәр эшсән кеше.
Офоҡта шәфәҡ йылмайһын,
Таңдар уянһын имен.
Һәр ваҡыт яҡты йөҙҙәрең
Башҡортостаным- илем!

**С .Әлибай**.

**4-се контроль күсереп яҙыу:**

**Нәби менән әбей.**

Китеп барғанда Нәби,
Трамвайға инде әбей.
Малай торҙо һикереп,
Әбейгә урын биреп.
Ә ул: “Ултыр , балам,- ти,
Баҫып бара алам”, –ти.
Әбей ҙә бара баҫып,
Нәби ҙә бара баҫып.

Әбей тағы :”Ултыр” – ти.
Нәби әйтә: “Мин ҙур”, –ти
Килеп уртаҡ фекергә,
Ултырҙы улар бергә.
Башта ултырҙы әбей,
Уға һыйынды Нәби.
Йылмайҙы бөтә халыҡ-
Бар донъя ҡуйҙы балҡып

.

**5. Һүҙлек диктанты ( Яҙ темаһы буйынса):**
Ҡояш ҡыҙҙыра, тамсы тама, Гөрләүек аға, ҡар ирей, ҡоштар ҡайта, яҙ етә, күләүектәр ята, ямғыр яуа, йылы ел иҫә, ағастар бөрөләнә, сәскәләр сыға, эштәр башлана.

**6- сы контроль күсереп яҙыу:**

**Әсәйем.**

Әсәйең кем тиһегеҙме?
Белмәйһегеҙме шуны ла?
«Алтын ҡуллы апай» тиеп.
Йөрөтәләр уны ла.
Ҡулы былай алтын кеүек
Ялтырап- нитеп тормай.
Ашханала бысаҡ тотоп,
Картуф, кәбеҫтә турай.
Бәлеш һала, туҡмас киҫә,
Тәмле аштар бешерә,
Торт яһаһа, өҫтәренә
Һырлап сәскә төшөрә.
Аш- һыуына, тәм-томона
Бөтә халыҡ һоҡлана.
Шуға алтынға тиң күреп,
Әсәй ҡулы маҡтала.
**( Ф. Мөхәмәтйәнов)**

# 6- сы а класы

**1-се контроль күсереп яҙыу:**

**Көҙҙәр еткәс.**

Һары ҡанаттарын йәйеп, тағы көҙ килде. Ул нисәнсе көҙҙөр инде, тик уҙғанынан бер яғы менән дә айырылмай кеүек. Элеккесә көндәр йылы, ҡоро тора.Элеккесә тын ғына бульвар , аллеяларға һары, ҡыҙғылт япраҡтар ҡойола. Ҡала өҫтөнән ҡыр ҡаҙҙары ла осоп үтте. Улар болон, урмандар шауын, тауҙар йәшеллеген үҙҙәре менән йылы яҡтарға, диңгеҙ буйҙарына алып китте. Көрһөнөп тә ҡуяһың. Ни эшләйһең, һәр нәмәнең үҙ ваҡыты бар, әммә бойоғорға һис урын юҡ, сөнки тыуыр көндәр менән хыялланып йәшәйһең.
Бына бөгөн дә шау-гөр киләбеҙ, газондарҙағы түтәлдәрҙе ҡаҙабыҙ, йомшартабыҙ, ағас ултыртабыҙ.

**2-се контроль күсереп яҙыу:**

**Тыуған яғыбыҙҙы өйрәнегеҙ.**

Беҙҙең тыуған илебеҙ, тыуған яғыбыҙ бик матур һәм бай тәбиғәтле. Мин Башҡортостанда йәшәгәнемә сикһеҙ шатмын..

Башҡортостан борондан башҡорт ере булған. Башҡорттар уны тыуған ер, тыуған төйәк тиҙәр. Улар төп халыҡ, ерле халыҡ һанала.

Башҡортостандың матур тәбиғәте, ер аҫты һәм ер өҫтө байлыҡтары, ҡалын урмандары, иркен яландары, мул һыулы йылғалары һәм күлдәре күптәрҙе ҡыҙыҡтырған. Шуға ла XVI быуаттан уҡ башҡорт ерҙәренә төрлө халыҡтар күсеп килә башлай. Хәҙер Башҡортостанда йөҙҙән ашыу милләт йәшәй. Уларҙы күсеп килеүсе халыҡ тип йөрөтәләр.

Беҙ тыуған еребеҙҙе, илебеҙҙе, телебеҙҙе яратырға бурыслы!

**3-сө контроль күсереп яҙыу:**

**Ишәк, эт, бесәй, әтәс.**

Борон заманда бер бабайҙың ишәге булған. Ишәк ҡартайғас, бабай уны ҡыуып сығарған. Ишәк китеп бара, ти. Ул бер этте осратҡан.

-Ишәк ағай, ҡайҙа бараһың?

-Ҡалаға артислыҡҡа китеп барам.

-Берәүҙән икәү яҡшы , мине лә эйәрт.

-Әйҙә, ниндәй һөнәрең бар?.

-Мин матур итеп өрә беләм .

Киттеләр ,ти былар . Бара торғас , бер бесәй осраны, ти.

-Ҡайҙа бараһығыҙ?

-Ҡалаға артислыҡҡа китеп барабыҙ.

-Мине лә эйәртегеҙ.

-Әйҙә, ниндәй һөнәрең бар?.

-Мин матур итеп мыяулай беләм.

Өсәүләп киткәндәр былар. Ауылға еткәндәр. Бер әтәс ҡойма башында ҡысҡырып ултыра, ти. Ишәк, эт, бесәй әтәсте лә саҡырғандар.Әтәс тә быларға ҡушылған.Улар дүртәүләп киткән. Бер ҡара урманға барып еткәндәр.Әтәс шыршы башына менеп төнәмәк булған. Ул урман эсендә бер өй күреп ҡалған......(артабан тексты дауам итергә)

**4-се контроль күсереп яҙыу:**

**Яҙ килә.**

Шатлыҡтар өләшеп һәр кемгә,
Яҙ килә, яҙ килә еремә.
Ел иҫә наҙланып, йыуанып,
Тамсылар бейешә ҡыуанып.
Кемгәлер сер һөйләй гөрләүек,
Ҡояшты уйната күләүек.
Күҙәтеп быларҙың барын да,
Сыйырсыҡ маҡтаны йырында.
Уның саф моңдарын ишетеп,
Сәскәләр йылмайҙы ҡар тишеп.

5-се **контроль күсереп яҙыу:**

**Башҡорт егете Шакирйән.**

«Батырҙарҙың да батыры» тигән даны таралған һәм рус фамилияһы менән энциклопедияларға ингән Александр Матросовтың башҡорт егете Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов булыуы документтар нигеҙендә тулыһынса асыҡланды.

Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов Башҡортостан Республикаһының Учалы районы Ҡунаҡбай ауылында тыуа. Ул 1934 йылда уҡ тыуған ауылынан сығып китә, сиғандар, моряктар араһында йөрөй. Унан һуң Ульяновск өлкәһенең Димитровград балалар йортона барып эләгә, һуңынан Һамар, Һарытау ҡалаларына барып юлыға. Ул унда ҡулға алына, Өфө балалар хеҙмәт колонияһына ебәрелә, ә 1942 йылда фронтҡа китә.Бик күп батырлыҡтар күрһәтә. Шуға ла ул беҙҙең хәтерҙә мәңгелек булып ҡаласаҡ.

# 7- се а класы

**1-се контроль эш.**

**Уҡытыусыма.**

Иҫемдә алтын һуҡмаҡҡа
Тәү аяҡ баҫҡан көнөм-
Тәү башлап мәктәп ишеген
Үрелеп асҡан көнөм.
Һин, укытыусым шундай наҙлап
Ҡараның күҙҙәремә,
Һүнмәҫлек ҙур дәрттәр һалдың
Бәләкәс йөрәгемә.
Һин етәкләп мендең мине
Тауҙарҙың бейегенә,
Алып киттең далаларға,
Диңгеҙҙәр киңлегенә.
Һин яратырға өйрәттең
Һәр бер биҙәген ерҙең,
Йондоҙло зәңгәр күктәрҙең
Серҙәрен асып бирҙең.
Иҫемдә алтын һуҡмаҡка
Тәү аяҡ баҫҡан көнөм-
Һәм тормошом китабының
Тәү  битен асҡан көнөм.

М. Кәрим

**2-се контроль эш.**

**Көҙ етте.**

Йәйҙең күңелле көндәре үтеп китте.Тәбиғәттә көҙ билдәләре күренә башланы. Көндәр ҡыҫҡара, төндәр оҙоная бара. Төндәр һалҡынная, ергә ап- аҡ ҡырау төшә.

Урмандар һәм баҡсалар тынып ҡалды. Ағастарҙа һары япраҡтар күбәйҙе. Ҡайһы бер ағастар ҡыҙылкөрән төҫ алды. Урман төрлө төҫтә балҡый.

Ҡоштар ҙа һайрауҙан туктаны. Улар йылы яҡҡа китергә әҙерләнәләр.

Йәй буйы шаулап торған йылға, күл буйҙары ла тынып ҡалған. Балалар үҙҙәренең мөһим эштәре – уҡыуға тотонғандар.
(66 һүҙ)

**3 –сө контроль эш.**

**Башҡортостан.**

Урал- башҡорт иле.Бынан биш йөҙ йыл элек башҡорттар Волганан алып Тубыл йылғаһына тиклем ерҙә йәшәгән. Ул Оло Башҡортостан тип аталған.Унда башҡорттар ғына йәшәгән.Улар ерле халыҡ һанала.

Ерһеҙ интегеп йәшәгән халыҡтарға башҡорттар үҙ ерҙәренә күсеп ултырырға рөхсәт иткән. Башҡорт ерҙәрендә урыҫтар, татарҙар, удмурттар, сыуаштар, мариҙар, украиндар, латыштар, белорустар, немецтар йәшәй. Уларҙы күсеп килеүсе милләт тип йөрөтәләр.

**4- се контроль эш.**

**Ҡурай моңо.**

Башҡорт ҡурайын сит илдәрҙә лә беләләр.Европа илдәрендә үҙенең ҡурайы менән беренсе булып Йомабай Иҫәнбаев сығыш яһаған. Артабан мәшһүр ҡурайсыларыбыҙ Ғата Сөләймәнов, Ишмулла Дилмөхәмәтов ҡурай моңо менән күп халыҡтарҙы ҡыуандырҙы. ӘРәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Азат Айытҡолов, ҡурай моңон Дания, Финляндия, Канада, Австралия, Германия, Сингапур, Яңы Зеландия, Афғанстан, Көньяҡ һәм Төньяҡ Америка, Монголия сәхнәләрендә ишеттерҙе.

**5- се контроль эш.**

**Башҡорт егете Шакирйән**.

«Батырҙарҙың да батыры» тигән даны таралған һәм рус фамилияһы менән энциклопедияларға ингән Александр Матросовтың башҡорт егете Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов булыуы документтар нигеҙендә тулыһынса асыҡланды.

Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов Башҡортостан Республикаһының Учалы районы Ҡунаҡбай ауылында тыуа. Ул 1934 йылда уҡ тыуған ауылынан сығып китә, сиғандар, моряктар араһында йөрөй. Унан һуң Ульяновск өлкәһенең Димитровград балалар йортона барып эләгә, һуңынан Һамар, Һарытау ҡалаларына барып юлыға. Ул унда ҡулға алына, Өфө балалар хеҙмәт колонияһына ебәрелә, ә 1942 йылда фронтҡа китә.Бик күп батырлыҡтар күрһәтә. Шуға ла ул беҙҙең хәтерҙә мәңгелек булып ҡаласаҡ.

## 8-се а класы

**1-се контроль эш.**

**Тыуған еркәйем.**

Күлдәр бында тәңкә-тәңкә,
Толом- толом йылғалар;
Ата- бабам ҡото булып,
Ғорур баҫҡан ҡаялар.
Тик үҙенсә йырлай бында
Тауҙары, далалары;
Күкрәгендә биҙәк кенә
Ауылы, ҡалалары.

Офоҡта шәфәҡ йылмайһын,

Таңдар уянһын имен.
Һәр ваҡыт яҡты йөҙҙәрең
Башҡортостаным- илем
Кисен яҡты йондоҙсоҡтар
Еремә күскән төҫлө.
Үҙ бәхетен үҙе таба
Беҙҙә һәр эшсән кеше.

**2-се контроль эш.**

**Башҡортостан.**

Урал- башҡорт иле.Бынан биш йөҙ йыл элек башҡорттар Волганан алып Тубыл йылғаһына тиклем ерҙә йәшәгән. Ул Оло Башҡортостан тип аталған.Унда башҡорттар ғына йәшәгән.Улар ерле халыҡ һанала.

Ерһеҙ интегеп йәшәгән халыҡтарға башҡорттар үҙ ерҙәренә күсеп ултырырға рөхсәт иткән. Башҡорт ерҙәрендә урыҫтар, татарҙар, удмурттар, сыуаштар, мариҙар, украиндар, латыштар, белорустар, немецтар йәшәй. Уларҙы күсеп килеүсе милләт тип йөрөтәлә

**3- сө контроль эш**
**« Ҡыш" темаһына инша**

**4- се контроль эш.**

**Башҡорт егете Шакирйән.**

«Батырҙарҙың да батыры» тигән даны таралған һәм рус фамилияһы менән энциклопедияларға ингән Александр Матросовтың башҡорт егете Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов  булыуы документтар нигеҙендә тулыһынса асыҡланды.

Шакирйән Юныс улы Мөхәмәтйәнов Башҡортостан Республикаһының Учалы районы Ҡунаҡбай ауылында тыуа. Ул 1934 йылда уҡ тыуған ауылынан сығып китә, сиғандар, моряктар араһында йөрөй. Унан һуң Ульяновск өлкәһенең Димитровград балалар йортона барып эләгә, һуңынан Һамар, Һарытау ҡалаларына барып юлыға. Ул унда ҡулға алына, Өфө балалар хеҙмәт колонияһына ебәрелә, ә 1942 йылда фронтҡа китә.Бик күп батырлыҡтар күрһәтә. Шуға ла ул беҙҙең хәтерҙә мәңгелек булып ҡаласаҡ.

## 9-сы а класы

**1-се контроль эш**

**Ысын дуҫлыҡ.**

Ҡоштар ҙа оҙон ҡышҡа ныҡлап әҙерләнә. Бүрекле беснәкте генә алайыҡ. Ҡуңыҙ, үрмәксе, бойҙай, eләк – бөтәһен дә йыя. Тик уның аҙыҡ-түлек туплау өсөн махсус һаҡлағысы юҡ. Ләкин ҡош аптырап ҡалмай. Һәр ағас һайын ярыҡ – бына һиңә меңәрләгән “келәт”. Бүрекле беснәк тапҡан һәр нәмәһен шунда йәшерә бара.

Бүрекле беснәктәр бер-береһе менән бик дуҫ. Йыйған ризыҡтарын бергәләп ашай улар. Аҙыҡ туплаған ағасты билдәләп тормайҙар. Кемдекен табып ашаһаң да ярай, тип уйлайҙарҙыр, күрәһең. Берәү бөтәһе өсөн тырыша, бөтәһе берәү өсөн көс түгә.

**2-се контроль эш**

**Тыуған илкәйем.**

Беҙҙең тыуған илебеҙ, тыуған яғыбыҙ бик матур һәм бай тәбиғәтле. Мин Башҡортостанда йәшәгәнемә сикһеҙ шатмын.. Башҡортостан борондан башҡорт ере булған. Башҡорттар уны тыуған ер, тыуған төйәк тиҙәр. Улар төп халыҡ, ерле халыҡ һанала.

Башҡортостандың матур тәбиғәте, ер аҫты һәм ер өҫтө байлыҡтары, ҡалын урмандары, иркен яландары, мул һыулы йылғалары һәм күлдәре күптәрҙе ҡыҙыҡтырған. Шуға ла XVI быуаттан уҡ башҡорт ерҙәренә төрлө халыҡтар күсеп килә башлай. Хәҙер Башҡортостанда йөҙҙән ашыу милләт йәшәй. Уларҙы күсеп килеүсе халыҡ тип йөрөтәләр.

Беҙ тыуған еребеҙҙе, илебеҙҙе, телебеҙҙе яратырға бурыслы!

**3-сө контроль эш**

**Балет.**

Балет спектаклдәре тәүге тапҡыр Францияла ҡуйыла. 1581 йылдың 5 октябрендә Париж ҡалаһы сәхнәләренең береһендә сәнғәттең яңы төрө – балет күрһәтелә. Балет – бейеп башҡарылған спектакль ул. Бейеү менән моңло көй аша тамашасы спектаклде һүҙһеҙ ҙә аңлай. Балет спектаклен ижад иткәндә башта либретто яҙалар. Ошо либреттоға нигеҙләнеп, композитор көй ижад итә. Ә балетмейстер бейеүҙе көйгә һала. Балет артистары уларҙың хеҙмәтен тамашасыға еткерә. Бына шулай балет спектакле тыуа.
Башҡортостанда тәүге балет 1954 йылда ижад ителә. Шунан һуң бер-бер артлы балет спектаклдәре ҡуйыла башлай.

**4-се контроль эш**

**Ҡош юлы.**

Бик борон булған был хәл. Ул саҡта әле йондоҙҙар ҙа, Ҡош юлы ла яралмаған, ти. Ҡайҙандыр алыҫтан, көньяҡтан, Урал тауы, Һаҡмар, Ағиҙел йылғалары буйҙарына торналар килеп йәйләр булған.

Бер йылды торналар йылы яҡка осҡан ваҡытта, ел-дауыл ҡупҡан. Бала торналар аҙаша, ҡайһылары арып, ергә төшә башлаған. Шул саҡ оло торналар, ҡалғандарына юл күрһәтең өсөн, ҡауырһындарын күк йөҙөнә сәскән. Улар йондоҙға әйләнгән. Торналар осҡан юлда ана шулай йондоҙҙар барлыҡҡа килгән. Ҡош юлы исеме шунан ҡалған. Рустар Ҡош юлын Млечный путь тип исемләгән. Уға хикәйәт тә сығарған. (85 һүҙ.)

**5-се контроль эш. Сығарылыш контроль эше.**

**1. Тексты күсереп яҙ.**

**Башҡортостан.**

Башҡортостан борондан башҡорт ере булған. Башҡорттар уны тыуған ер, тыуған төйәк тиҙәр. Улар төп халыҡ, ерле халыҡ һанала. Бынан биш йөҙ йыл элек башҡорттар Волганан алып Тубыл йылғаһына тиклем ерҙә йәшәгән. Ул Оло Башҡортостан тип аталған.

Башҡорт ерҙәрендә урыҫтар, татарҙар, удмурттар, сыуаштар, мариҙар, украиндар, латыштар, белорустар, немецтар йәшәй. Уларҙы күсеп килеүсе милләт тип йөрөтәләр.

Башҡортостандың матур тәбиғәте, ер аҫты һәм ер өҫтө байлыҡтары, ҡалын урмандары, иркен яландары, мул һыулы йылғалары һәм күлдәре күптәрҙе ҡыҙыҡтырған. Шуға ла XVI быуаттан уҡ башҡорт ерҙәренә төрлө халыҡтар күсеп килә башлай. Хәҙер Башҡортостанда йөҙҙән ашыу милләт йәшәй. Уларҙы күсеп килеүсе халыҡ тип йөрөтәләр.

2. **Текстан милләт атамаларын күсереп яҙ.**

**3. Нөктәләр урынына тейешле һүҙҙәрҙе ҡуйып яҙ:**

1. Башҡортостандағы иң ҙур йылға- .
2. Башҡортостандағы ҙур күлдәр-.
3. Башҡортостандың иң бейек тауҙары-
4. Башҡортостандың баш ҡалаһы-
5. Беҙ йәшәгән ҡала һәм район исеме-
6. Ҡалалар:
7. Автобустар ниндәй ҡалала эшләнә?
8. Вертолеттар ниндәй ҡалала эшләнә?
9. Ниндәй башҡорт халыҡ геройын беләһең?